## 2 – 4 синыф уҡыусылары өсөн Башҡорт теленән эш планы

### Уҡыу предметын үҙләштереүҙә планлаштырылған һөҙөмтәләр

“Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында”ғы законда һәм башланғыс дөйөм белем биреү федераль дәүләт стандартында ҡуйылған талаптар буйынса башҡорт телен туған тел булараҡ уҡып, 4-се класты тамамлаған уҡыусылар түбәндәге *шәхси* һөҙөмтәләргә эйә булырға тейештәр:

Уҡыусы өйрәнәсәк:

- үҙаллылыҡҡа, белем алыуға етди һәм яуаплы ҡараясаҡ;
- мәктәп һәм класс йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына һаҡсыл буласаҡ;
- һаулығын нығытасаҡ һәм һаҡлаясаҡ;
- атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә, уҡытыусыларға, яҡындарына, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы буласаҡ;
- тыуған ил, туған тел матурлығын, күркәмлеген тоя беләсәк, уларҙы һаҡлаясаҡ, үҙ халҡының традицияларын, йолаларын өйрәнәсәк, таратасаҡ.
- уҡыуға, хеҙмәткә ҡарата яуаплы мөнәсәбәт формалаштырасаҡ;

Уҡыусы өйрәнергә мөмкинселек аласаҡ:

- үҙ аллы уҡырға, мәғлүмәтле булыу оҫталығын камиллаштырырға; тикшеренеү-эҙләнеү эшен планлаштырырға; парлап, төркөмләп, команда менән эшләргә.
- алған мәғлүмәтте ҡағыҙға теркәргә.
- билдәләмә, ҡағиҙә, алгоритм, һығымта һ.б. график схема, модель, таблица ярҙамында теркәргә.
- диалог ҡорорға, уҡыу материалын тикшерергә, анализларға, һығымта яһарға.
- мәҙәниле аралашыу этикетына өйрәнергә; үҙ фекереңде ҡыҫҡа һәм аңлайышлы итеп еткерергә, уны яҡлай белергә.

*Метапредмет һөҙөмтәләре:*

Уҡыусы телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен өйрәнәсәк:

- үҙ аллы белем аласаҡ, мәғлүмәт йыясаҡ һәм уларҙы ҡуллана беләсәк.
- дәрес барышында уҡытыусы менән берлектә эшләйәсәк; дәрескә маҡсат ҡуясаҡ һәм уны дәрес һуҙымында күҙ уңында тота белергә һәм тормошҡа ашырасаҡ, эште дөрөҫ планлаштырасаҡ, эҙләнеү эше алып барасаҡ.
- эҙләнеү эше һөҙөмтәләре буйынса презентация эшләргә.
- тиҫтерҙәре һәм оло кешеләр менән итәғәтле һөйләшергә, кеше менән мөнәсәбәт ҡороу оҫталығын үҙләштерәсәк.
- эшләгән эштәрен дөрөҫ баһалаясаҡ һәм кәрәк саҡта төҙәтмәләр индерәсәк.

*Предмет һөҙөмтәләре:*

Уҡыусы өйрәнәсәк:

- һүрәтләү, хикәйәләү тибындағы текстарҙы тыңларға һәм аңлап ҡабул итергә.
- бирелгән тема буйынса диалог төҙөргә; диалогты дауам итергә.
- программала бирелгән шиғырҙарҙы яттан тасуири һөйләй белергә.
- тексты дөрөҫ, аңлы, тасуири уҡырға.
- ижади диктанттар, өйрәтеү изложениелары һәм иншалары яҙырға; иптәшенең яҙғанын һәм үҙ яҙмаларыңды тикшерергә.
- өйҙә башҡортса гәзит-журналдар, китаптар уҡырға һәм класта шулар тураһында фекер алышырға (кластан тыш уҡыу күнекмәләре).

Уҡыусы өйрәнергә мөмкинселек аласаҡ:

- уҡыу процесына яуаплы ҡарарға, маҡсат ҡуйырға, эште планлаштыра белергә, уҡыу мәсьәләләрен сисә белергә.
- теге йәки был тема буйынса кәрәкле мәғлүмәт тупларға, эҙләнеү эше алып барырға, уның буйынса презентация эшләй белергә.
- мәҙәниәтле аралашыу оҫталығына, телмәр этикетына эйә булырға, үҙ фекерен яҡлағанда, уй-тойғоларын еткерә алырлыҡ аныҡ, эҙмә-эҙ бәйән итергә, әңгәмәсенең уй-тойғоларын аңларға тырышырға, уның менән иҫәпләшә һәм уртаҡ фекергә килә белергә.

- билдәле кимәлдә башҡорт теленең лексик-фразеологик минимумын үҙләштерергә һәм телмәрҙә ҡуллана белергә.

<u>Түбәндәге күнекмәләргә эйә булырға тейеш:</u>

- өйрәнелгән материалды анализларға, сағыштырырға, предметтарҙы ниндәйҙер билдәләре буйынса классификацияларға, дөйөмләштерергә;
- предметтарҙың төп үҙенсәлектәрен айырырға, аңлата белергә;
- предметҡа, күренешкә ҡарата үҙ фекеренде әйтә һәм уны иҫбатлай белергә;
- әхләҡи һәм эстетик тәрбиә бирергә;
- уҡыуҙы коммуникатив йүнәлештә алып барырға;
- башҡорт теле системаһының бөтә кимәлдәрен (фонетик, лексик, морфологик, синтаксик, стилистик, пунктуацион) иҫәпкә алыу һәм практик файҙаланырға;
- телмәр эшмәкәрлеген бөтә төрҙәре өҫтөндә эшләргә;
- предмет-ара бәйләнеш, тарих, сәнғәт, мәҙәниәт, әҙәбиәт, халыҡ ижады һәм традицияларына нигеҙләнеп өйрәнергә.

<u>Үҙләштергән белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡулланырға:</u>

- аралаша белеү һәләтен үҫтерергә (аралашыусанлыҡ, хислелек, эмпатия хистәре);
- ихтыяр көсө, маҡсатлылыҡ , әүҙемлек кеүек һәләттәрҙе үҫтерергә.
- уҡыусыларҙы башҡорт әҙәби телендә дөрөҫ һөйләшергә, өйҙә, йәмғиәт урындарында, хеҙмәт процесында башҡорт әҙәби телен практик файҙаланырға өйрәтергә.
- башҡорт телендә нәшер ителә торған гәзит-журналдарҙы, әҙәби китаптарҙы үҙ аллы уҡып аңлау күнекмәләрен бирергә.
- үҙ фекерәнде билдәле кимәлдә бәйләнешле итеп һөйләй һәм яҙа алыу күнекмәләрен формалаштырырға.
- телде өйрәнеү барышында балаларҙы башҡорт халҡының фәһемле тарихы, бай мәҙәниәте, әҙәбиәте, сәнғәте, күренекле шәхестәре, йолалары, тыуған илдең тәбиғәте һ.б. менән таныштырырға, уларҙы башҡорт донъяһына алып инергә, башҡорт халҡына, уның теленә, үҙе йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләргә.
- бөтә һаналғандарға таянып, башҡорт телен, әҙәбиәтен өйрәнеү нигеҙендә, балаларҙа туған телгә ихтирам тәрбиәләргә, уларға патриотик һәм интернациональ тәрбиә бирергә.

<u>Ижади һәләттәрҙе үҫтереү:</u>

- шиғыр, тиҙәйткестәрҙе яттан һөйләй белеү;
- иншалар, яттан шиғыр һөйләүселәр  конкурстарында ҡатнашырға.

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**

**2 класс**

*Танышыу.* Әә хәрефе. Кем? Нимә? һорауҙары. Һһ хәрефе. Кем ни эшләй? Предметтың атамаһын, хәрәкәтен белдергән һүҙҙәр

*Ижек.* ң хәрефе. Һүҙ. Һүҙ моделе. Һүҙҙәге ижектәр. Нимә? Ҡайҙа? һорауҙары

*Һандар.* Ҙҙ хәрефе. Нисә? Күпме? һорауҙары. 1-10-ға тиклемге һандар

*Предметты белдереүсе һүҙҙәрҙең яңғыҙлыҡ мәғәнәһе.* Үү хәрефе. Нимә? Нимәләр? Нимә менән? һорауҙары. Эйәлек мәғәнәһенең бирелеше.Ҡҡ хәрефе

*Өн.* Тартынҡы өндәр. Өн моделе. Ҡ һәм ғ сиратлашыуы. Ғғ хәрефе. Һуҙынҡы өндәр. Нәҙек, ҡалын өндәр. Өө хәрефе. Һөйләмдә һүҙҙәрҙең килеү тәртибе. Исемдәрҙең күплек мәғәнәһе. ç хәрефе

*Баҫым.* Һүҙҙең өн моделе. Башҡорт телендә ю,я хәрефтәренең яҙылышы. Йо, йө, йы, йе, йү, йә ҡушымсалары

*Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар.* Башҡорт теленең тартынҡы өндәре һәм хәрефтәре, уларҙың дөрөҫ әйтелеше һәм яҙылышы. Предметтың хәрәкәтен белдереүсе һүҙҙәр. Ни эшләй? һорауына яуап биргән һүҙҙәр. Логик баҫым

*Һөйләм төрҙәре.* Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Һүҙҙәрҙе юлдан юлға күсереү. Предметтың билдәһен белдереүсе һүҙҙәр. Ниндәй? һорауы. Төҫтәрҙе сағыштырыу. Предметтың билдәһен белдереүсе һүҙҙәрҙең һөйләмдә ҡулланылышы

*Күсереп яҙыу*

**3 класс**

*Танышыу.* Телмәр төрҙәре. Ҡайҙа? Һорауы, -ла,-лә,-да,-дә,-та,-тә,-ҙа,-ҙә ялғауҙары.

*Минең мәктәбем.* Текстың темаһы, төп фекере, өлөштәре. Һөйләм. Баш һәм эйәрсән киҫәктәр. Һүҙ һәм уның мәғәнәһе. Синонимдар. Антонимдар.

*Минең Республикам.* Омонимдар. Яһалма һүҙҙәр. *Һүҙ, ижек, өн.* Өн һәм хәреф. Башҡорт теленең һүҙлек составы. Рус теле аша ингән һүҙҙәр. Оо,Өө хәрефтәре

*Мин һәм минең ғаиләм.* Әә, Ээ, Ее, Үү , Яя, Юю хәрефтәре. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар Гг-Ғғ, Кк-Ҡҡ, Зз-Ҙҙ хәрефтәре. Хх-Һһ, Нн- ң, Сс-ç, Уу-Үү, Вв хәрефтәренең яҙылышы.

*Мин һәм минең дуҫтарым.* Йй, ц, ч, щ хәрефтәренең яҙылышы. Тартынҡыларҙың сиратлашыуы. ъ-ь хәрефтәре. Һүҙ төркөмдәре. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. Исемдәрҙең берлек һәм күплек формалары. Ҡуш тартынҡыға, ь билдәһенә бөткән һүҙҙәрҙә ялғау.

*Мине уратып алған донъя.* ҙ-т, к-ҡ хәрефтәренә бөткән исемдәрҙә килеш ялғауҙары. -нь, -ль, -брь, -рь хәрефтәренә бөткән һүҙҙәр. Ҡылым. Ни эшлә? Ни эшләмә? һорауҙары. Тамырында о-ө хәрефтәре булған һүҙҙәрҙә ҡылым ялғауҙары. Ни эшләне? Ни эшләгән? һорауҙары. Ҡуш тартынҡыға – орфограмма. Сифат. Сифат дәрәжәләре. Алмаштар. Зат алмаштары

*Контроль эш*

**4 класс**

*Танышыу.* Телмәр һәм тел. Текст төрҙәре.

*Минең мәктәбем.* Өндәш һүҙ. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре. Аныҡлаусы. Тултырыусы. Хәл

*Минең Республикам.* Һүҙ һәм уның мәғәнәһе. Синонимдар, антонимдар, омонимдар. Һүҙ составы. Тамырҙаш һүҙҙәр. Һүҙ яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе ялғауҙар. Ҡушма һүҙҙәр. Ярҙамсы һүҙҙәр. Һүҙ төркөмдәре. Исем. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. Исемдәрҙең һан, эйәлек заты менән үҙгәреше. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. -ль,-нь,-рь,-брь,-сь,-чь хәрефтәренә бөткән исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше

*Мин һәм минең ғаиләм.* -ст,-сть,-зд,-фт,-ск,-нк хәрефтәренә бөткән исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Күплектәге исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Сифат. Сифат дәрәжәләре. Төп һәм шартлы сифаттар. Һан. Ябай һәм ҡушма һандар. Һан төркөмсәләре: төп, рәт, йыйыу һандары Һандарҙың килеш менән үҙгәреше. Алмаш. Алмаш төркөмсәләре: зат, эйәлек, һорау, күрһәтеү алмаштары. Алмаштарҙың килеш менән үҙгәреше

*Мин һәм минең дуҫтарым.* Ҡылым. Яһалышы. Заман формалары. Ҡылымдың заман формалары. Ҡылымдың барлыҡ-юҡлыҡ категорияһы. Ҡылымдың зат менән үҙгәреше.

*Мине уратып алған донъя.* Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре. Һүҙ төркөмдәре. Бөтә үтелгәндәрҙе ҡабатлау

**Тематик план**
**2 класс**

| № | Бүлек атамаһы | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Танышыу | 3 |
| 2 | Ижек | 5 |
| 3 | Һандар | 4 |
| 4 | Предметты белдереүсе һүҙҙәрҙең яңғыҙлыҡ мәғәнәһе | 4 |
| 5 | Өн | 5 |
| 6 | Баҫым | 5 |
| 7 | Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар | 4 |
| 8 | Һөйләм төрҙәре | 5 |
| Барлығы | | 35 |

**3 класс**

| № | Бүлек атамаһы | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Танышыу | 2 |
| 2 | Минең мәктәбем | 5 |
| 3 | Минең Республикам | 5 |
| 4 | Мин һәм минең ғаиләм | 5 |
| 5 | Мин һәм минең дуҫтарым | 7 |
| 6 | Мине уратып алған донъя | 11 |
| Барлығы | | 35 |

**4 класс**

| № | Бүлек атамаһы | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Танышыу | 1 |
| 2 | Минең мәктәбем | 6 |
| 3 | Минең Республикам | 10 |
| 4 | Мин һәм минең ғаиләм | 10 |
| 5 | Мин һәм минең дуҫтарым | 5 |
| 6 | Мине уратып алған донъя | 3 |
| Барлығы | | 35 |